Муниципаль автономлы

мәктәпәкәсә белем биреү учреждениеһы

«Сулпылар» балалар баҡсаһы

# Юл хәүефһеҙлеген иҫкәртеү буйынса профилактик операция «Иғтибар, балалар!»

Тәрбиәсе:

Ҡәйепҡолова З.Ғ.

Сибай – 2017

# Хәүефһеҙ юлдар булмай!



ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре ҡала мәктәптәрендә һәм балалар баҡсаларында булып, юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәү йәһәтенән аңлатыу эштәре алыпбара, шул уҡ ваҡытта йәйәү һәм йәмәғәт транспортында йөрөү ҡағиҙәләре, кеше ғүмеренә һәм һаулығына ҡурҡыныс менән янаған күңелһеҙ хәлдәр хаҡында мәғлүмәттәр бирә.

Тәү сиратта, балалар хәүефһеҙлегенә ата-әсәләр һәм педагогтар яуаплы. Бында балаларҙы үҙендеке һәм сит кешенеке тип бүлеү дөрөҫ түгел. Кескәй йәйәүлеләрҙе ҡурсалауҙы барыбыҙҙың да дөйөм бурысыбыҙ тип иҫәпләп, ҡурҡыныс янаған ваҡытта бәләгә тарыусыға ярҙам ҡулы һуҙырға тейешбеҙ.

***<u>Түбәндәге кәңәштәр өлкәндәр өсөн файҙалы булыр</u>***:

- Балағыҙға даими рәүештә юлдан дөрөҫ сығыу хаҡында аңғартып тороғоҙ. Һүҙҙең миҫал менән нығытылыуы тағы ла яҡшыраҡ булыр.
- Ашыҡмаҫҡа өйрәтегеҙ. Юлға аяҡ баҫыр алдынан туҡтап, тирә-яғына ҡарап алыу, етеп килгән транспортты үткәреү хаҡында аңлатығыҙ.
- Балағыҙҙың өйҙән мәктәпкә тиклемге маршрутты яҡшы белеүе мотлаҡ. Ошо юлдан уның менән бергә үтеп, хәүефле урындарҙы бер нисә тапҡыр күрһәтегеҙ.
- 14 йәше тулмаған балағыҙҙы үҙен генә велосипед менән юлға сығармағыҙ.
- Киске сәғәттәрҙә хәүефһеҙлекте тәьмин итеү маҡсатында балағыҙҙың кейеменә, портфеленә сағылдырыусы элементтар ҡуйығыҙ.
- Балағыҙға юл аша йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән махсус урындан йәки светофорҙың йәшел төҫөнә генә сығыу кәрәклеген һәр саҡ әйтеп тороғоҙ.

**Иң мөһиме: юлда һәр ваҡыт иғтибарлы**
**һәм һаҡ булырға кәрәк.**
**Хәүефһеҙ юлдар булмай, тигән һүҙҙәрҙе**
**иҫегеҙҙә тотоғоҙ!**



## ***Хөрмәтле атайҙар  һәм  әсәйҙәр!***

Баланың  урамда үҙ – үҙен тәртипле тотоуҙа һәм унда юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен формалаштырыуҙа һеҙҙе бер кемдә алыштыра алмай.

Һеҙ - тәртип өлгөһө. Бигерәк тә баланы ҡулынан алып машиналар йөрөгән юлға аяҡ баҫҡанд, был турала һис тә оноторға ярамай.

Әгәр балағыҙ бәләгә тарымаһын тиһәгеҙ көн һайын юл хәрәкәте ҡағиҙәләренә ихтирам тәрбиәләгеҙ.

# Мәктәпкәсә йәштәге бала белергә тейеш:

- өлкәндәрһеҙ юлға сығырға ярамай, ҡулынан
- алып барғанда ысҡынмаҫҡа һәм яңғыҙына тротуарҙан китмәҫкә;
- тротуарҙың тик уң яғынан атларға;
- юлды тыныс переход (өҫкө йәки аҫҡы) аша ғына үтергә кәрәк;
- урамды үтер алдынан тәүҙә светофорға иғтибар итергә: «йәшел төҫ рөхсәт итә, барыһына йөрөргә»;
- юл – машиналар ә тротуар – йәйәүлеләр өсөн;
- йәмғиәт транспорттарында тәҙрәнән ҡулды йә уйынсыҡтарҙы сығарып барырға ярамай;
- әгәр урамда аҙашҡан икән, ҡысҡырып иламаҫҡа ә үтеп барған өлкәндәрҙән йә полициянан адресын әйтеп ярҙам итеүҙәрен һорарға тейеш.

# Хөрмәтле ата - әсәләр!

Баланы үҙ ваҡытында юл ситуацияларын хәл итергә өйрәтегеҙ, балала урамда тәртипле, иғтибарлы булыу һәләтен тәрбиәләгеҙ.

**Онотмағыҙ! Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙоп үҙегеҙ баланыла тәрһеҙлеккә этәрәһегеҙ!**

Урамда барғанда балалаға тәртип «дәресе» бирергә ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ.

**Мәктәпкә сыҡҡансы бала урамда йәки транспортта булһа ла киләһе тәртип ҡағиҙәләрен белергә һәм үтәргә тейеш:**

- юлдан ситтә уйнарға;
- урамды йәйәүлеләр өсөн билдәләнгән урындан үтергә;
- йүгермәй, атлап үтергә;
- юл аша сыҡҡанда светофор сигналдарына иғтибар итергә;
- юл аша сыҡҡанда тәүҙә һул шунан уң яҡка ҡарап алырға;
- етеп килгән транспорт алдына сыҡмаҫҡа;
- юл ситендә туҡтаған машиналарҙы хәүефһеҙ үтергә, юлды асыҡ күрергә;
- машина тротуарға килеп туҡтаһа тик уң яғынан сығырға;
- машиналар хәрәкәтләнгән юлға велосипед менән сыҡмаҫҡа.



# Светофор

Юл ситендә светофор
Балҡыта өс төҫлө нур.
Ҡыҙыл,һары һәм йәшел,
Ярҙамы уның бик ҙур.

Әгәр ҡыҙыл төҫ янһа,
Туҡта уның алдында.
Һары төҫ һиңә әйтә:
«Ҡуҙғалырға ваҡыт етә!».



Йәшеле рөхсәт итә,
Барыһына йөрөргә.
Янһа һары, һин туҡта,
Ҡыҙыл төҫөн көтөргә.









